
Шағир Р.Ғариповтың ҡоштар
хаҡындағы шиғырҙары


«һабантурғай», «һабантурғай, һабантурғай...»

## Һабантурғай

Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай,
Ҡарҙар бөткәнен дә көтөп тормай...
Һабансылар күңелен нурлай-нурлай,
Һай, йырлай ҙа һуң һабантурғай!

Йә атылып күккә менә уҡтай,
Йә йомолоп ергә төшә туптай,
Ерҙе күккә әйҙәп яна уттай,
Был еҙ шөңгөр ҡасан ялға туҡтай?

Ҡанатынан яҙҙы түгә буғай,
Яҙға ҡойона бар ялан-туғай.
Түгелдер был, ахыры, һабантурғай,
Был йөрәгем, ахыры, шулай йырлай?!..





«Һандуғас таңы», «Мылтыk һәм һандуғас», «һандуғас һайраған була...», «һандуғас...»



## Һандуғас таңы

Ҡайҙан шундай илһам һиндә?
Ҡайҙан һиндә шундай дәрт?
Иç-аҡылым китеп,
Тыңлап торам...
Һандуғасым,
Тартынмасы,

йәсе, әйт!..
Мин көнләшәм бары һинән генә,
Бары һинән генә көнләшәм.
Һай, был моңонӘ..



«Торналар», «Торналарға табыныу», «Сыңрау торна»



## Торналар

Һауалайзар көҙгө сыуаҡ күктә
Торройҡ- торройҡ килеп торналар.
Әйтерһең дә, сафҡа теҙелешеп,
Еҙ моңдарын ҡоя торбалар.

Оҙаҡ-оҙаҡ ошо алыҫ ауаз
Сыңрап тора, күктә һарлығып.
Һағышлы бер хыял донъяһында
Оноторһоң ерҙең барлығын.

Яландарҙың йәме бөткән кеүек,
Ташлап киткәс юлсы ҡоштары.
Ә бит тағы ҡыуандырыр бер көн
Шул уҡ моңдар, үткәс ҡыштары


«Таныш күгәрсендәр»

## Таныш күгәрсендәр

Гөлдөргөү! Гөлдөргөү! Күгәрсендәр
Тәҙрә баштарында геүләйҙәр.
Ғүмер итеп, бала сығаралар,
Галстукһыҙ мине белмәйҙәр.

Күгәрсендәр. Таныш күгәрсендәр –
Юлдаштары бала сағымдың.
Бала сағым һеҙҙең гөрләүҙәрҙә,
Ни тиклем мин һеҙҙе һағындым!

Ә ул сәләм ҡыҙыл майҙандағы
Илем йөрәгенең үҙенән.
Ул йөрәкте тәү ҡат һиндә күрҙем
Уҡытыусымдың йылы һүҙенән.




«Аҡсарлаҡтар»



# Аксарлактар

Аҡсарлаҡтар, аҡсарлаҡтар!..
Әсаһығыҙ ҡыйылып.
Саҡ торам мин, һоҡланыуҙан
Ҡысҡырмайса тыйылып.

Бит әҙернә-йәйә һымаҡ
Аҡбуҙ ҡанаттарығыҙ,
Суҡышығыҙ – тоҫҡалған уҡ,
Мәргән – ҡараштарығыҙ.

Атылғанда тулҡындарға
Йәйәгеҙ менән бергә, -
Һоҡланмайса һеҙгә ҡарап,
Ҡалай итеп түҙергә?

Тиккәме һуң күрке итеп,
Һеҙҙе һайлаған диңгеҙ?
Беҙ, һеҙҙә – ҡул, беҙҙә ҡанат
Ниңә булмаған, тибеҙ?..


«Сыйырсыҡ», «Оҙаҡ тыңлап торҙом сыйырсыҡты... », «Сыйырсыҡтар ҡайтты яҙ артмаҡлап...»



## Сыйырсыҡ

Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ!
Ояңдан осоп сыҡ!
Оҡшаһа был өйөң,
Түгелһен моң –көйөң!..

Ҡошсоғом сыҡты ла,
Ҡанатын ҡаҡты ла,
Һокланды ояға,
Таң ҡалды донъяға.

Йәм-йәшел болонда
Бер ғәмһеҙ ҡолондай,
Ул кешнәп ебәрҙе, -
Кәйефен күтәрҙе.

Инә ҡаҙ артынан
Сылбырҙай тартылған
Бәпкәләр шикелле,
Субырҙай күңелле.


«Қарлуғас»



# Ҡарлуғас

Ҡарлуғасҡай, сабый хыялыма
Инден дә һин Туҡай йырылай,
Бикбай “Ҡарлуғас”ы булып остоң...
Һине һағынып инде ир илай.

Хәтеремдә тәүге тамашалар,
Хәтеремдә тәүге күҙ йәшем.
Балалыҡта осҡан ҡарлуғастың,
Шатмораттың тапмам тиңдәшен.

Аҫылынып клуб тәҙрәһенә,
Ҡарлуғастың йырын тыңлауға
Инде хәҙер күпме йылдар уҙғанӘ –
Әле булһа ул йыр сыңлауға
Мин һиҫкәнеп китәм...


«Ҡарғалар kайтыуы»



# Ҡарғалар ҡайтыуы

Яҙ көтөүҙән әллә иләҫләнеп,
Белгән һымаҡ сәнғәт рәтен,
Алып ҡайтым элдем бүлмәмә мин
Бала саҡтың таныш һүрәтен.

Һәм һүрәттән ҡапыл яҙ бөркөлдө,
Һөрән һалды ҡара ҡарғалар,
Яҙ еҫтәре, гүйә, бәреп инде,
Боҙ аҡтарып, аҡты йылғалар.

Мәғәнә бар ҡарға йырында ла,
Һөрән һалған саҡта “ҡар ҙа ҡар!”
Алда әле, тиҙәр, һандуғаслы,
Ҡыуаныслы күпме яҙҙар бар!..


«Яңғыҙ аҡҡош», «Аҡҡош йыры»,
«Аҡҡош күлендә»



# Яңғыҙ аkkош

Моңая аҡҡош, моңая,
Моңая яңғыҙ ҡалғас –
Ғүмер дуҫы, һәләк булып,
Ҡара ҡайғыға һалғас...

Аҡҡош шундай ҡош икән ул:
Башҡаларҙы иш итмәй,
Башҡа аҡҡош ҡаңғылдаһа,
Тауышын да ишетмәй;

Ғорур һөйөүен үҙенең
Бирмәйенсә йәбергә,
Һауалай ҙа зәңгәр күктән
Ташлана, тиҙәр, ергә...

Тик был аҡҡош оса алмай –
Ҡанатҡайын ҡырҡҡанға.
Сикһеҙ екһенеп ҡарай ул
Янына һырыҡҡанға...


«Ҡантүш турғайҙар»


Кантүш турғайҙар

Түшкенәһе менән көрттәр ярып,
Ҡайтып еткән ҡантүш турғайҙар.
Һағыныуҙар шулай итәлер шул,
Аҡман-тоҡман тип тә тормайҙар.

Туп-туп булып ризыҡ-ем сүпләргә
Һарылғандар ана сағанға.
Хайран итеп торам шул сағанды,
Алмағасҡа оҡшап ҡалғанға.

Алмалары, алһыу алмалары
Тупылдашып ҡарға төшкәндә,
Ялҡынынан яҙҙар башланғандай,
Ҡарҙар ҡайнап, боҙҙар бешкәндәй...

«Ҡәкүк», «Тулҡынлана, шаулай аҡ ҡайын...», «Ҡәкүк төндәре»







# Кәкүк

Кәкүк, кәкүк?
Әйтсе миңә,
Күпме минең ғүмерем?
Күпме минең был донъяла
Шатлыктарым, күререм?

Кәкүк. Кәкүк?
Ниңә улай
Һүҙең һаран: бер, ике, өс
Оҙағыраҡ ҡысҡырырға
Тапмайһыңмы берәй көс?









«Йүрүҙән ҡаҙҙары», «Тырыш ҡаҙ»



# Йүрүҙән ҡаҙҙары

Ҡояш байып, инде күҙ бәйләнде,
Киске эңер күмде ауылды,
Күтәрелеп килгән ай янына
Һанһыҙ йондоҙҙар ҙа ҡабынды.

Тау башында, Йүрүҙәнгә ҡарап,
Тулҡын моңон тыңлап ултырам.
Ай нурҙары алтын һуҡмаҡ булып,
Тулҡындарҙа ята ҡалтырап.

Әйтерһең дә, минең бала сағым
Шул һуҡмаҡтан ҡайта йүгереп,
Йә ул унда йәрә һалып йөрөй,
Йә ҡыуҡыулай, атын йөҙҙөрөп.

# «Ҡара ҡанаттарым ҡағып ҡунып...»
# «Бөркөт»







Ҡанатында – күктәр
һалҡынлығы,
Ҡарашында – таузар һағышы.
Туңып ҡалған уның
күззәрендә
Болоттар һәм йылдар ағышы.



Йоҡомһорап шулай төш
күрәме,
Сикһез уйны упҡан бөркөттө?
Ҡапыл ғына уның хыялдарын
Бала-саға шулай өркөттө.

Кемдер бына икмәк һондо
уға,
Ниндәй тәм тапҡан ул
икмәктән?
Оялғандыр, бәлки, үз
затынан;

“Тәбиғәт менән бер туған булып, унан көс алып йәшәү – Р.Ғарипов лирикаһын бынған тыш бөтөнләй күҙ алдына килтереп булмай. Был шәхестең барлыk яҙмышы ер-һыу яҙмышы менән айырылғыһыҙ”

Р. Бикбаев